# БАРОМЕТР

Үткән йәйҙе, бер ваҡытты, арыш ужымы баш сығара башлағас, көндәр бик ҡыҙыуға китте. Бер аҙна буйына ямғырҙың әҫәре лә булманы.

Үҙегеҙ беләһегеҙ инде, беҙҙең крәҫтиән халҡының бар ҡарап торғаны шул иген булғас, йәйгә сыҡһаң, баҫыуҙан күҙеңде алмайһың. Иген үҫкәндә, ямғырҙар булып, баҫыуҙарҙа йәм булһа, күңел дә шат була. Баҫыуҙа үҫеп ултырған иген өмөтлө күренһә, шуға ҡарап ас тамағың да туҡланып киткән кеүек була. Ә инде бына көндәр аҙ ғына ҡороға китә башланымы, йөрәгең ус төбөндә тора. Игендәр ҡоромаһа, аслыҡ килмәһә генә ярар ине, тип уйлайһың. Бер баҫыуға, бер күккә ҡарайһың: берәй яҡтан болот киҫәге күренмәйме, исмаһам, тиһең.

Үҙегеҙ беләһегеҙ инде беҙ ҡара халыҡты ни, ата-олатанан уҡ бындай эштәрҙе алла эше тип ҡарарға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Бала саҡтан уҡ атайың-әсәйең шуны туҡығас, мулла-маҙары ла шул алла, әхирәт, тамуҡ- фәлән тип башты ҡатырғас,— нишләйһең бит, ышандырғандар инде шунда.

Үткән йәйҙе, тим әле бына, ямғырҙар булмай торғас, халыҡ арлы-бирле һөйләнеп йөрөй башланы.

— Баҫыуға сығып, намаҙ уҡырға кәрәк,— тиҙәр. Бер баҙарҙа мулла ла һүҙ ҡуҙғатып ҡуйҙы:

— Гөнаһтарыбыҙ күп, йәмәғәт, динде онота башланыҡ. Намаҙ-нияз юҡ. Йомаларға ла бик аҙ йөрөй башланығыҙ,— ти, маҙар, ти. Беҙ ни, ҡара халыҡ, бер гөнаһ- маҙар белмәһәк тә:

— Шулай инде, мулла,— тип торған булабыҙ. Бер көндө муллала бала ҡараусы булып торған ҡыҙ, кем, Гөлбикә килгән.

— Атаҡайым, бына,— ти,— мулла ағайҙың әллә ниндәй машинаһы бар, ти. Шуға ҡарайҙар ҙа ямғыр тураһында һөйләшәләр. Бөгөн иртән торғас та, абыстай әйтә: «Был нәмәңдең теле түбән төшә башлаған, ти, ямғыр яуыр ахыры», ти. Мин ишек асып тыңлап торҙом. Мулла ағай асыуланырға тотондо: «Аҫырау-маҙар ишетер, ниңә ҡысҡыраһың?!» ти.

«Мин үҙем дә күреп торам. Бөгөн халыҡты ямғыр теләргә баҫыуға алып сығырға кәрәк» ти. «Үҙҙәре ихахайлап көлөшәләр»,— тип ҡыҙый әйтә.

Мин дә, ни, ундай әкәмәтте бер ҙә күргәнем юҡ. «Мулланың ундай нәмәләре бөтмәҫ инде, ҡыҙым», мин әйтәм. Шулай ҙа күңелгә шик төштө. Ямғырҙы алдан белдерә торған машина буламы икән ни, тим. Мулла халҡы хәйләкәр була ул, уныһын яҡшы беләм инде уның. Әмәлгә ҡалғандай, урамдан үҙебеҙҙең совет председателе Хәмәтйән уҙып бара. Ул донъя күргән кеше инде. Һалдатта ла бик күп йөрөнө. Ҡыҙылдарҙа командир булып та йөрөгән. Үҙе коммунист. Ул белмәй булмаҫ, мин әйтәм. Саҡырып индерҙем тегене. «Бына шундай-шундай эш, мин әйтәм, шундай машина булырға мөмкинме» тим. Гөлбикәнән тағы ла бер ҡат бәйнә-бәйнә һөйләтеп сыҡтыҡ. Хәмәтйән көлөп үк ебәрҙе:

— Бик була, Сәйфуҡ ағай,— ти.— Беҙ уны үҙебеҙ колхозға алырға торабыҙ әле,— ти, исемен дә әйтеп һөйләй, барометр тиме шунда.— Ямғыр-маҙар, болот, буран буласағын берәр тәүлек алдан белдерә ала ул,— ти.— Мулла шуның арҡаһында халыҡты төп башына ултыртырға йөрөй ул, беләм мин уны,— ти. Шулай итеп һөйләштек тә, ул сығып китте.

Ул арала булманы, төш ваҡыты еткәс тә, халыҡ йыйылып йөрөй башланы.

— Баҫыуға намаҙ уҡырға барабыҙ,— тиҙәр.

Ҡайҙа, мин әйтәм, мулла нәмә һәйләр икән, тим, мин дә халыҡҡа эйәрҙем.

Ауыл ситендәге әрәмә буйына, йәшел сиҙәмгә күп кенә халыҡ йыйылған.

Мулла башта вәғәз һөйләп алды:

— Йәмәғәт,— ти,— ихлас күңел менән аллаға ялбарайыҡ. Доғабыҙ ҡабул булһа, бына иртәгә үк хоҙай ямғырҙы бирер,— ти. Әһә, мин әйтәм, беләһен, икән, тип эстән генә уйлап торам. Халыҡ ҡиблаға ҡарап, рәт- рәт булып теҙелә башланы.

Мәзин ҡарт, аҙан әйтергә тип, ике ҡулы менән ҡолаҡтарын ғына тотҡайны, ауыл яғынан председатель Хәмәтйән менән бер нисә кеше килә. Хәмәтйән алыҫтан уҡ ҡысҡыра:

— Туҡтағыҙ әле, ағай-эне, бер эш бар...— Ҡулында ҡояш яҡтыһында бер нәмә ялтырай. Халыҡ аптырап китте.

— Нәмә, һуғыш-маҙар бармы икән әллә? Имен түгел тип торалар ине! — тиҙәр ҡайһы берәүҙәр.

— Намаҙҙы башланыҡ, йәмәғәт! — ти мулла әйтә.

Ә халыҡ Хәмәтйән һөйләгәнде көтә. Мулла Хәмәтйән ҡулындағы нәмәһен генә күргәйне, ағарҙы ла ҡатты бит! Юрый тегене күҙәтеп торам.

— Намаҙ уҡымаһағыҙ ҙа, иртәгә йәки иртәнән һуңға барыбер ямғыр буласаҡ! — ти Хәмәтйән әйтә.— Бына был машина һауа үҙгәрешен күрһәтә,— ти.

Халыҡ араһында шау-шыу китте:

— Юҡты һөйләй Хәмәй, машина нәмә белһен? — тиҙәр.

— Әллә аҡылдан яҙа башланы инде! Будильник тотоп килгән дә...— тиештеләр.

— Белә шул инде,— ти.— һеҙ шулай тиһегеҙ ҙә, бына мулла бер ҙә улай тип тормай икән шул. Иң элек уны иҫәпкә алығыҙ: был мулла нәмәһе. Оҙаҡламай ямғыр яуасағын белгән дә бына һеҙҙе намаҙға йыйған булған. Ямғыр яуҙы иһә, доғағыҙ ҡабул була, тимәксе. Ә бында һис бер төрлө алланың-маҙарҙың ҡатышы юҡ...

Халыҡ,  ни, бер нәмә лә әйтергә белмәй.

Мулла әйтә:

— Хәмәтйән, һин минең өҫкә яла яғаһың, бындай нәмәне минең күргәнем дә юҡ. Комсомолдар үслек менән минең йортома ташлағандарҙыр! — ти бит, оялып нитеп тормай Бер ваҡытта ла муллаға ҡаршы һүҙ әйткәнем юҡ ине юғын да, хәҙер түҙеп булманы:

— Юҡ инде, мулла,— мин әйтәм,— бөгөн иртән генә ошо машинаға ҡарап оҫтабикәң менән көлөшөп һөйләшкәнеңде, халыҡты йыйыу

тураһында көлөп һөйләгәнеңде йәшермәксе булаһыңмы? — тим. Мулла ыҡ-мыҡ итте лә халыҡҡа ҡарай башланы. Ну, халыҡ араһынан бер кем дә мулланы яҡлап өндәшмәгәс, мулла боролдо ла китте. Уның артынан бер нисә тиҫтә ҡарт- ҡоро эйәрҙе. Хәмәтйән халыҡҡа теге әкәмәт тураһында аңлатырға тотондо.

Шулай итеп, намаҙ уҡылмай ҡалды.

Иртәгеһен шундай һәйбәт итеп ямғыр яуып ебәрҙе! Ямғыр артынан ҡояш сыҡты. Ул йәнләнеп китте инде ер, бына йәнгә рәхәт булып тора!

Теге барометр тигән әкәмәтте совет йортона элеп ҡуйғандар.

— Халыҡты алдағаны өсөн конфисковать иттек,— ти, Хәмәтйән әйтә. — Әле ана стрелкаһы тағы күтәрелгән, значит, көн аяҙ буласаҡ әле,— ти. Ну алдашалар ҙа инде был мулла халҡы, уйлап торһаң — иҫең китер.

Тотмайым шуларҙа ҡыҙымды, бына колхозға яҙылырға торам, йәшәрбеҙ әле нисек булһа ла. Сүмәлә ҡорһаҡҡа ни етте — шул хаҡҡа эшләп ятҡансы, үҙебеҙгә эшләр, исмаһам...